# ҺИҢЙЫЛАР

Бәләбәй калаһы Башкорт гимназия – интернаты гәзите №3 (119), декабрь 2019 йыл

# *Яңы йыл менән!*




***Ҡәзерле гимназистар, хөрмәтле уҡытыусылар,***
***тәрбиәселәр һәм ата - әсәләр!***

***Һеҙҙе яҡынлашып килгән 2020 йыл менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!***

***Беҙгә өмөттәр бүләк итеп, хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашырған, ҙур еңеүҙәр килтергән 2019 йыл да тиҙҙән тарих биттәрендә ҡалып, күңел йылыһы, тылсым бүләк иткән Яңы – 2020 йыл киләсәк.***

***Ҡәзерле уҡыусылар! Һеҙгә Яңы йылда уҡыуығыҙҙа, спорт, фән һәм ижад өлкәләрендә ҙур уңыштар, ынтылыштар, еңеүҙәр; изге хыялдарығыҙ тормошҡа ашыуын теләйбеҙ! Һәр көнөгөҙ шатлыҡ-ҡыуаныс менән үтһен.***

***Хөрмәтле уҡытыусылар! Яңы йыл һеҙгә тик яҡтылыҡ, эшегеҙҙә һәм шәхси тормошоғоҙҙа сағыу тәьҫораттар, ҡыуаныс алып килһен!***

***Беҙ оло йөрәк хистәре менән балаларын бағып үҫтергән һәм тәрбиәләгән ата-әсәләргә, поэмалар һәм романдар ижад иткән, быуындан-быуынға аманат итеп ҡалдырған аҡылдары өсөн оло шәхестәребеҙгә рәхмәтлебеҙ. Ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған мәҙәни һәм рухи мираҫты һаҡларға, үҫтерергә, байытырға тейешбеҙ. Шунда беҙҙең көсөбөҙ!***

***Һеҙгә барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, тыныслыҡ, именлек, оло шатлыҡтар ғына кисереп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ! Һәр көнөгөҙҙән көс-дәрт алып, ҡыуаныс-мөхәббәткә сорналып ғүмер итегеҙ. Яңы йыл менән! Аҡ бәхеттәр һеҙгә!***

***Иң изге теләктәр менән БГИ директоры Д.Ғ. Фәтхетдинова***

### *Ҡыштың күренештәре*

Ағастарға бәҫ ҡунған,
Йәнлектәр ҙә йоҡлаған.
Тирә-яҡҡа йәм өҫтәп,
Ергә аҡ ҡарҙар яҡҡан.
Бына һеҙгә башватҡыс,
Йә, уйлағыҙ тиҙерәк!
Дүрт миҙгелдең ҡайһыһы
Тәбиғәтте яулаған?
***Нәсретдинова Алһыу,***
***8-се б класы уҡыусыһы.***



### *Ҡыш етте*

Донъяга аҡ төҫ өҫтәп,
Аяҡ аҫтында шығырлап,
Өс ай буйы шатландыра
Ҡарҙың һәр бер бөртөгө.
Аҡ балаҫтан атлай-атлай
Килеп етер Ҡыш бабай.
Изге теләктәр әйтер,
Бүләктәрен таратыр.
***Изиәтуллина Сулпан,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***

## *Яңы йыл яҡынлаша!*

Тышта әкрен генә ябалаҡлап ҡар яуа. Күктә етегән йондоҙҙар йымылдаша. Нисек тышта рәхәт?! Әлбиттә, ҡыш етә бит! Бына оҙаҡламай сатлама һыуыҡтар, ҡарлы бурандар башлана. Тик уға ҡарамаҫтан, ҡыш үҙенең матурлығын, гүзәллеген юғалтмай. Ҡыш миҙгеле кешегә ниндәйҙер тойғо, ҡабатланмаҫ минуттар бүләк итә. Һәм шул минуттарҙҙың иң серлеһе - 31 декабрь, Яңы йыл. Был көндө бар халыҡ шатлана, бейей, йырлай, күңел аса. Бала-сағалар Ҡыш бабайҙы саҡырып, уның менән уйнап-көлөп, бүләктәр алалар. Уҡыусыларға икеләтә шатлыҡ килтерә был байрам. Беренсенән, Яңы йыл, икенсенән, оҙаҡ көткән каникулдар башлана. Бөтә ғаилә менән өҫтәл артына йыйылып, Яңы йылды бергәләшеп, күңелле итеп ҡаршылау - үҙе бер бәхеттер тип уйлайым. Юҡҡа ғына ата–бабалар әйтмәгәндәр бит: “ Яңы йылға нисек керһәң, шулай үткәрерһең,” - тип.

Дуҫтар! Ошо Яңы йылда мин һеҙгә уҡыуығыҙҙа гел уңыштар, муйыл сәскәһендәй аҡ бәхет, ҡурай моңондай оҙон ғүмер, ҡоростай ныҡлы таҙалыҡ, байрамды күңелле итеп үткәреүегеҙҙе теләйем!

***Шәрифуллина Альбина, 9-сы б класы уҡыусыһы.***

# Кыштың матурлығы

### Буран

Тышта буран ҡотора,
Өйҙә Зәһир уйнап ултыра.
Ел - дауылдар ыжғыра,
Уны тышҡа саҡыра.

«Әйҙә сыҡ, - ти - уйнарға,
Ҡар бабайҙар эшләргә,
Икәүләшеп, гөрләшеп,
Бергә күңел асырға”.

***Кудинова Азалия,***
***5-се в класы уҡыусыһы.***



### Дуҫтарыма өндәшәм

Беләһегеҙме һеҙ, дуҫтар,
Ниндәй байрам яҡынлаша?
Ергә ҡар бөртөктәре төшә?
Ниңә донъя ап-аҡ төҫтә?

Был һорауҙарға яуапты
Бөтә балалар белә.
Киләһе Яңы йылда
Уңыштар һәммәгеҙгә!
***Кадырова Гүзәл,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***

### Тирә-яҡ ап-аҡ булған

Бөгөн иртән тышҡа
сыҡһам,
Тирә-яҡ ап-аҡ булған.
Урмандағы бер ағасҡа,
Кыш бабай бәҫ
ҡундырған.

Ошо көндән башлап хәҙер,
Ябалаҡлап ҡар яуа.
Тирә-яғыбыҙ шым ғына
Тәмле йоҡоға тала.
***Миһранова Юлиә,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***






### Кыштың матурлығы

Бөгөн иртән урамға сыҡһам, аптырап киттем: бөтә тирә -яҡ ап-аҡ ҡарға күмелгән. Ынйы-ынйы ҡар яуа. Әйтерһең дә, кемдер күктән ҙур иләктән он иләй. Мең нурҙар һибеп, ҡар ялтырап ята. Ағастарҙың ботаҡтарына бәҫ ҡунған.Тирә-яҡта торған ағастар ап-аҡ шәлгә бөркәнгәндәр. Төрлө яҡлап шат балалар тауышы ишетелә: кемдер саңғы шыуа, кемдер Ҡар бабай яһай. Уларҙың биттәре ҡыҙарған. Өҫ-баштары ҡарланып бөткән.

Бөтә миҙгелдәр араһында миңә ҡыш миҙгеле бик оҡшай, сөнки ҡыш көнө саф һауа, саңғыла, конькиҙа шыуырға була. Бына тиҙҙән үҙенең сатлама һыуыҡтары, ҡаты бурандары менән, тирә-яҡҡа йәм бөркөп, шатлыҡтар өләшеп Яңы йыл да килер.

Һеҙҙе барығыҙҙы ла яҡынлашып килгән Яңы йыл байрамы менән ҡотлайым!

***Ғималетдинова Азалия, 5-се б класы уҡыусыһы.***

### Кар яуа

Тышта ап-аҡ ҡар яуа.
Бөгөн шундай саф һауа.
Йүгер тиҙерәк урамға
Ҡар бабайҙы яһарға.

Тышта инде бик һыуыҡ,
Унда буран ҡотора.
“Ярай, әйҙә сыҡ бында!“
Сана, саңғы шыуырға.

Боҙҙа хоккей уйнарға,
Конькиҙарҙа йөрөргә.
Ялтырай ерҙә ҡарҙар,
Ҡыҙыл битле малайҙар.

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***9-сы б класы уҡыусыһы.***



# Шыршы байрамы тарихынан

Яңы йыл ҡаршылағанда шыршы биҙәп ултыртыу йолаһы немецтарҙан килә. Мәңге йәшел был ағасты мәңгелек символы тип танып, улар 1521 йылда Селест ҡалаһы майҙанында тәүге шыршыны биҙәй. Шыршыны ялтырауыҡ эре шарҙар менән биҙәүҙе лә немецтар башлай. Анғлия короленың немец туғандары был йоланы ул илгә лә алып бара.

Байрам һайын яңы ҡотлауҙар уйлап ултырып ялҡҡан бер чиновник шул ваҡыта Яңы йыл открыткаһын уйлап таба. Тап шул открыткаларҙа тәүләп Санта Клаус образы тыуа ла инде. Әйткәндәй, йыл ҡаршылағанда бер-беренде ҡотлау йолаһы боронғо Вавилонда һәм Римдә лә булған. Шулай уҡ яңы йыл алдынан барлыҡ бурыстарҙан ҡотолоу йолаһы ла уларҙан бар донъяға күскән.

Ә Рәсәйҙә тәүге Яңы йыл шыршыһы 1852 йылда Санкт-Петербургтың хәҙерге Мәскәү вокзалы бинаһында ҡабына. Был йоланы Рәсәй буйлап таратыу ҙа бик ҙур ауырлыҡ менән бара.

1927 йылда, Совет илендә динғә ҡаршы көрәш башланғас, Рождество рәсми байрам булыуҙан туҡтай һәм шыршы ла “дини иҫкелек ҡалдығы» тип иғлан ителә. Әммә 1935 йылда Сталиндың әмере буйынса балалар өсөн шыршы байрамдарын яңынан үткәрә башлайҙар. 1941 йылдың декаберендә ул ваҡыттағы ил старостаһы Михаил Калинин халыҡҡа мөрәжәғәт менән сығыш яһап, 1 ғинуарҙы Яңы йыл байрамы – ял көнө тип иғлан итә. Тимәк, беҙгә лә шыршы байрамы тик һуғыш алдынан ғына килеп еткәндер тип фаразларға кәрәк. Ул балалар өсөн уйын сараһы булараҡ ҡына ҡабул ителә, ә иң ҡыҙығы – Ҡыш бабай бүләге, ул замандарҙа үтә дефицит булған тәм-том таратыу була.

Яңы йылда битлек - маскалар кейеп йөрөү мәжүсилек замандарынан уҡ ҡалған. Был көндә был һәм «теге» донъя менән бәйләнеш үтә яҡыная һәм шуға, шау-гөр килеп, улар булып кейенеп, ен-шайтандарҙы өркөтөү мотлаҡ тип һаналған. Тап шул замандан төрлө йәндәрҙе, шайтандарҙы яныңа саҡырып, уларҙан киләсәк яҙмышыңды юрау йолаһы ҡалған. Иблес-шайтандар менән бәйле булыу сәбәпле, күрәҙәселекте Ислам дине хупламай.

*“Аманат” журналынан*



## *Ҡотлайбыҙ!*

*Көтөп алған ҡыш та килеп етте. Оҙаҡламай Яңы йыл байрамы ла ҡапҡаға шаҡыр. Хөрмәтле уҡытыусылар, тәрбәселәр, ҡәҙерле уҡыусылар! Һеҙҙе яҡынлашып килгән Яңы 2020 йыл менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Һеҙгә, уҡытыусыларға, ауыр эшегеҙҙә еңеллек, ҡоростай һаулыҡ, Ағиҙел йылғаһындай оҙон ғүмер, аҡ бәхеттәр, ә уҡыусыларға уҡыуҙарында уңыштар, ныҡлы һаулыҡ, аҡ юл теләйбеҙ.*

*Киләһе йыл һеҙгә тик уңыштар, бәхеттәр генә килтерһен, хәтерегеҙҙә иҫтәлекле, ҡыҙыҡлы ваҡиғалар ғына ҡалһын.*

*Был байрам бит ҡабатланмай көн дә,*
*Килә тик йылына бер генә.*
*Бер килгәндә уның ҡәҙерен белеп,*
*Ҡаршылайыҡ уны бергәләп.*

## *Яңы йыл менән!*

# Ил өҫтөндә Яңы йыл тыуа

## Ҡыш

Бына ҡыш килеп етте,
Бөтә тирә яҡ ап-аҡ.
Хайуандар йоҡоға китте,
Ҡуян туны булды аҡ.
***Кудинова Азалия,***
***5-се в класы уҡыусыһы.***



Уйлап □ар□ы□ □ле!

Йомшаҡ ҡына, аҡ ҡына,
Сана шыуыр саҡ ҡына,
Урамда озаҡ йөрөһәң,
Битте семетә саҡ ҡына.

☼ ☼ ☼

Һыуыҡлығы көйҙөрә,
Бейәләйҙәр кейҙерә.
Тик ятмай ул гел генә.
Исеме икән нимә?

☼ ☼ ☼

Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай.

☼ ☼ ☼

Осоп китә, йөҙөп китә,
Ваҡыт еткәс, ереп бөтә.

***Миһранова Лилиә,***
***4-се г класы уҡыусыһы.***

## Көләмәстәр

Яңы йыл төнө. Телефон шылтырай.
- Алло! Әсләм дусты мөмкинме?
- Һин нимә? Бында бер ниндәй Әсләм дә юҡ!
- Был 2-22-33 номерымы?
- Юҡ, был 2-22-24.
- Әй, барыбер йәнәш кенә бит, саҡырығыҙ әле.

☺☺☺

-Ғәли, һинең алты алмаң бар, яртыһын ҡустыңа бирҙең. Үҙеңә нисәү ҡала?
- Әлбиттә, биш ярым!

☺☺☺

– Алло, Ғәлиҙе телефонға мөмкинме?
- Юҡ, ул китапханаға киткәйне.
- Ә нимә эшләй унда?

☺☺☺

Иртәнсәк озағыраҡ йоҡларға уйлаһағыҙ, кистән үк йыуынып, кейенеп, тамағығыҙҙы туйҙырып ятып йоҡлағыҙ.

☺☺☺

Бер батша күрәҙәсенән:
- Мин ҡасан үлермен икән?-тип һорай.
- Байрам көнөндә,- тигән тегеһе.
- Уны ҡайҙан беләһең?
- Бәй, һин үлгән көн ҙур байрам буласаҡ бит! – тип яуаплаған күрәҙәсе.

***Йосопова Радмила,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***





## Ҡыш

Килеп етә инде ҡыш көнө
Ап-аҡ ҡарҙар яуа башларҙар.
Өс мөйөшләп осоп китер ҡоштар,
Ҡышлаусылар оҙатып ҡалырҙар.

Йәнлектәр ҙә тик тормаҫтар,
Арып йоҡога ятыр.
Ҡурҡаҡ ҡуян, бүренән ҡурҡып
Кейемен алмаштырыр.

Урманға барһаң инде,
Тып тыныс, ап-аҡ булыр.
Ҡоштар ҙа һайрамаҫтар,
Көндәр бик һыуыҡ булыр.

Ә урамда балалар
Шаярышып уйнарҙар.
Уларга күңелле, рәхәт
Саф-һауа бит бик кәрәк.

Мин дә инде тик тормаҫмын,
Уларга ҡушылырмын.
Дуҫтар менән бергә уйнап,
Сана, саңғы шыуырмын.

***Шәрифуллина Альбина,***
***9-сы б класы уҡыусыһы.***





«Ынйылар»

Учредитель-Администрация МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебей РБ
Выходит с 1 сентября 2005 года.

Главный редактор З.Х.Исламова
Ответственная за выпуск З.Х. Исламова .
Верстка З.Х. Исламова
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей, ул. Морозова, 2, каб. №36
Телефон: 5-31-43
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 70 экз. 26. 12. 2019 г. 9. 00 ч.